

Мостай Кәрим (Мостафа Сафа улы Кәримов)
1919 йылдың 20 октябрендә Башҡортостандың
Шишмә районы Келәш ауылында тыуған.

- *1941 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетын тамамлай.*



● *Мостай Кәрим 30-сы йылдар уртаһында яҙа башлай. 1938 йылда уның «Отряд ҡуҙғалды» тигән беренсе шиғырҙар китабы, ә 1941 йылда икенсе Яҙғы тауыштар» китабы донъя күрә. Ул артыҡ шиғри һәм проза йыйынтыҡтары, 10-дан артыҡ драматик әҫәрҙәр баҫтырған.*



# Мостай Кәрим - балаларҙың яратҡан яҙыусыһы.





Мостай Кәрим –

Башҡортостандың халыҡ шағиры,

СССР-ҙың Социалистик Хеҙмәт Геройы,

СССР-ҙың Ленин һәм Дәүләт премиялары,

Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге

дәүләт премияһы лауреаты.

# Һуғыш һәм хыял



*Мостай Кәрим Бөйөк Ватан һуғышының беренсе көндәренән алып еңеүгә тиклем һуғышта була – бәйләнеш начальнигы, дивизия артиллерияһы штабы начальнигы булып хеҙмәт итә. Ҡаты яралана, һауығыу менән һуғыш гәзиттәренең хәбәрсеһе булып эшләй. Һуғыштан һуң тулыһынса ижади һәм йәмәғәт эшмәкәрлегенә бирелә.*

# Мостай Кәримдең әҫәрҙәре












Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим һәр быуын кешеләренең яҡын дуҫы, замандашы, әҙәбиәтебеҙҙең аҡһаҡалы, халҡыбыҙҙың ғорурлығы булып күңелдәребеҙгә

сорналған.



# ҠОШТАР ОСОРАМ

Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы тамам,
Бар эшемдең сыҡтым осона.
Шуға күрә бөгөн таңдан алып
Күкрәгемдән ҡоштар осорам.

Аҡлыҡ, хаҡлыҡ өсөн көрәшселәр!
Тәү бүләгем һеҙгә, ҡарағыҙ:
Ҡанаттарын ғорур ҡаға-ҡаға
Күтәрелде күккә ҡарағош.

Юлдағылар! Һеҙгә ебәрәмен
Ел-дауылдар үтер торнаны.
Сирлеләрем, кәкүк осорам һеҙгә –
Оҙаҡ-оҙаҡ саҡыра торғанын.

Сығып осто ярһыу бер һандуғас,
Ғашиҡтарым, һеҙҙең өлөшкә.
Көткәндәргә – аҡ күгәрсен килер,
Яңы өмөт өҫтәп өмөткә.

Хыялыйҙар, сая һәм йыуаштар!
Һәммәгеҙгә тейер ҡошом бар.
Ғәмһеҙҙәргә генә һис нәмә юҡ –
Әйҙә улар ҡошһоҙ торһондар.

Ығы-зығы, ваҡ мәшәҡәт тамам,
Бар эшемдең сыҡтым осона.
Шуға күрә һәр көн таңдан алып
Күкрәгемдән ҡоштар осорам.

1970





Һуғыштан һуң Мостай Кәрим төрлө вазифалы
эштәрҙә эшләй.1951-1962 йылдарҙа ул
яҙыусылар союзының рәйесе булып тора.

Тоғро хеҙмәте
өсөн 1963 йылда
Мостай Кәримгә
Башҡортостандың
халыҡ шағиры
тигән исем бирелә.





«Мостай Кәрим шиғриәтебеҙҙең тормошсанлығын, фәлсәфә нигеҙҙәрен бик нык тәрәнәйтте, уны өр-яңы нәфис биҙәктәргә байыҡтырҙы.»

яҙыусы Әхиәр Хәкимов







Мостай Кәрим 2005 йылдың
21 сентябрендә вафат булды.